*Нияз* **АЛСЫНБАЕВ**

# Юғалған самолет
## (мистик повесть)



*Авторҙан. 2014 йылдың 8 мартында “Малайзия һауа юлдары” компанияһына ҡараған самолет серле рәүештә юғалып булды. (Шул уҡ йылдың йәйендә Донбасс өҫтөндә бәреп төшөрөлгән “Боинг” менән бутамаҫҡа!) Нисек кенә эҙләп ҡараһалар ҙа, авиалайнер табылманы, уның бортындағы 227 юлаусының һәм 12 экипаж ағзаһының яҙмышы әле бөгөн булһа ла билдәһеҙлектә ҡала...*

Бынан 3000 йыл элек. Көньяҡ Америка. Ҡайҙалыр Амазония шырлыҡтарында.

Ҡара Ягуар, шыр яланғас ҡырағай кеше, ап-аҡ ҡомло йылға буйында балыҡ тота ине. Бейек ағастар, уларға һырылып үҫкән ҡуйы ҡыуаҡтар, сырмалсыҡ лианалар йылға өҫтөн ҡаплап, ҡараңғы бер сатыр яһай. Шуға ла ҡояш нурҙары ергә сыбарланып төшә, көн эҫеһен дә бер аҙ һүрелтә биргәндәй. Бихисап ҡоштар һайрай. Аяу белмәҫ пума, ҡыр бесәйе, күләгәлә ята. Сусҡаға оҡшаш хайуандар — тапирҙар һуҡмаҡ буйлап һыуға ашыға. Ара — сағыу ҡанатлы, һәлпе ҡойроҡло, кәкере суҡышлы тутыйғош — ойоп ултыра. Индеец тәнен ҡыҙыл-ҡара төҫтәргә буяған. Ул да тәбиғәттең бер биҙәге, ғәҙәти бер өлөшө. Бына кеше оҙон сәстәрен артҡа һелкә ташланы, һаҡ ҡына ҡыҫҡа һөңгөһөн күтәрҙе. Ялтыр һыртлы балыҡ ылымыҡлы таш араһына инеп боҫҡайны. Хәҙер, хәҙер...

Шул саҡ алыҫта ниндәйҙер сәйер ауаз яралды. Дәһшәтле олоуға ла, меңәрләгән кешенең бер юлы һыҙғырыуына ла, күк күкрәүенә лә тартҡайны ул. Ҡара Ягуар башын күтәрҙе. Теге олоу яҡынайҙы, өҫтөнән нимәлер шаулап үтеп китте. Күләгәһе ерҙә йылп итеп кенә ҡалды. Эйе-эйе, йәшел сатырҙан саҡ ҡына юғарыраҡ ҡот осҡос ҙур ҡош осоп үткәйне. Ғүмерҙә күрмәгән, ғүмерҙә ишетмәгән хәтәр тауышлы, ап-аҡ ҡанатлы ҡош!

— Ау! Ау! Ау!

Ҡара Ягуар йәшен тиҙлегендә яр буйлап сапты. Йомшаҡ йылы ҡомда эре-эре баҫҡан эҙҙәре генә уйылып ҡалды. Һыу эсергә төшөп килгән хайуандарҙы өркөттө, улары төрлөһө-төрлө яҡҡа һибелде. Бихисап телдә һайраған ҡоштар тынды, бары тик ҡарт тутыйғош ҡына йәмһеҙ тауыш менән аҡырып ебәрҙе. Бесәй ҙурлыҡ ҡына маймылдар сәрелдәште, унда-бында һикереште лә көтөүҙәре менән урман шырлығына олаҡты. Әллә ҡайҙан пәйҙә булып, сельва төпкөлөнә ҡолап төшкән енле ҡош һәммәһенең дә ҡотон алғайны.

2014 йыл, 7 март. 06 сәғәт 15 минут. Малайзия.

Таң атмағайны әле. Ҡеҫә телефоны дерелдәне, экраны яҡтырып-яҡтырып алды ла ҡурай моңон гөжләтеп ебәрҙе. Самат йөрәкһенеп уянды, сөнки әлеге көй бик-бик һирәк уйнай. Был номерға тик Рәсәйҙән генә шылтыраталар ине. “Алтын аждаһа” тип аталған ике йондоҙло, шыҡһыҙ ғына ҡунаҡханала туҡталғайнылар. Тәҙрә ҡаршыһында төҙөлөш краны тора, шуның кабинаһынанмы, тимер ҡабырғаһынанмы, ҡайҙандыр ут яҡтыһы төшә. Трубканы алды. Бэтси уянманы, сабый төҫлө йомарланып йоҡлай бирҙе. Сәс шәлкемдәре яҫтыҡҡа һибелгән, ҡабарынҡы ирендәрен мәҙәк кенә сәпелдәтеп алғылай. Ир шым ғына өндәште:

— Эйе...

— Самат, һинме? Привет! — Теге остан ҡырҡыу тауыш яңғыраны.

Бисәһе шылтырата! Өфөнән! Башҡортса!

— Эйе-эйе, Фәүзиә, сәләм!

— Аҡсам бөтә! Әйтәһе һүҙем шул! Малайың өйләнә!

— Нимә-ә-ә?

— Срочно ҡайтып ет! Бөгөн сыҡһаң, өлгөрәһең!

— Ҡарәле, Фәүзиә...

— Пип-пип-пип... — Трубканы һалып та ҡуйҙылар. Ҡиренән йыйып ҡараны, әммә теге яҡ “һүнгәйне”, ҡыҫҡа ауаздар ғына ишетелде. Бэтси барыбер уянды.

Әйтерең бармы, бисәһенең зәһәр тауышы мәйетте лә аяғына үрә баҫтырыр! Ҡыҙ йылмайып ебәрҙе, унан рәхәтләнеп кирелде, һөрмәле ҙур күҙҙәрен асты.

— What's up, hunny?

— Oh! Nothing special...

Самат ҡыҙҙы ҡосағына алды. Тегеһе мыйылдап ҡына иркә һораны:

— Who's that?

— My headache...

— Headache?! But i was sleeping!

— I mean the wife number two! My former...

— Am I your number one?

— Surely![1]

Самат ҡыҙҙың йылы ҡосағында ирене, әммә элекке бисәһенең көтөлмәгән хәбәре башынан сыҡманы. Малайың өйләнә? Артурик өйләнә! Ҡәһәрең, ни арала үҫеп еткән, тиерһең... Фәүзиәне күптән кисергәйне, шуға ла асыуы ҡалмағайны. Булған икән — булған. Булған да бөткән. Аҡса кәрәктер, ана бит, эҙләп тапҡан. Бэтси йәнә мыш-мыш йоҡлап китте. Ә ир күҙҙәрен түбәгә төбәп, талғын ғына эшләгән кондиционер моңон тыңлап ята бирҙе. "Бөгөн үк сыҡһаң, өлгөрәһең"? Әйтеүе рәхәт... Улар бит Бэтси менән никахҡа керергә тейештәр... Бөгөн... Мәсеттә... Мулла әйткәйне бит... Юҡ, шулай ҙа, ҡайтып килергә тура килер, моғайын...

3000 йыл элек. Ҡайҙалыр Амазония шырлыҡтарында.

Яномауи ҡәбиләһе яугирҙары джунгли шырлыҡтарында көн иткән ҡырағайҙар араһында иң яусыл, иң уҫал, иң ҡыйыуҙарҙан. Улар бер нәмәнән дә, бер кемдән дә ҡурҡмай. Хатта йәһәннәмдән ҡолап төшкән ҡоштан да! Шул кисте үк улар көмөш ҡанатлы ғифрит ятып үлгән урынды һырып алды. Ҡара Ягуар башлап йөрөнө — ни тиһәң дә, ул бит беренсе булып күрҙе тегене. Абруйы һуңғы сәғәттәрҙә тәҡәтһеҙ күтәрелгәйне.

Күк тәңреһе ебәргән сәйер ҡош ағастар өҫтөн һыпырып үтеп, тигеҙ һәм асыҡ йылға ярына килеп ҡунғайны. Артынан тәрән генә бураҙнаһы тороп ҡалған. Мәгәр беҙҙең заман кешеһе булһа, Ҡара Ягуар "Боинг" осоусыларының йылға өҫтөн үҙенсәлекле аэродром рәүешендә бик оҫта файҙаланыуына хайран ҡалыр ине. Самолет артыҡ зыян күрмәгән, бары тик фюзеляжы йәмшәйә биргән. Двигателдәре һүнгән. "Боинг—777" һул ҡабырғаһына ҡырынайып, моронон ҡомға батыра биреп туҡтап ҡалғайны. Һис кеше заты күренмәй, урта ишеге ярым асыҡ...

Ҡара Ягуар ағаһы Ҡанлы Һөңгө менән ҡушарлап бәйләнгән ағастарҙы йәнәш терәне, ошо ашығыс әтмәләнгән баҫҡыс буйлап "ҡош"тоң ҡабырғаһына үрмәләне. Таш башаҡлы һөңгөләрен әҙер тотоп, шым ғына эскә үттеләр. Йөҙҙәре

---

[1] — Нимәкәй булды, йәнем?
— Юҡсы, бер нәмә лә булманы...
— Кем ул кешекәй?
— Бисәм...
— Ah-ah! Һуң мин эргәңдә йоҡлап ятам даһа?
— Юҡ та, мин икенсе һанлы бисәмде әйтәм... Элекке бисәмде.
— Ә мин һинең беренсе һанлы кәләшең, ибет?
— Әлбиттә!

ҡурҡыуҙан ап-аҡ булғайны, ҡулдары дерелдәй, тештәре тешкә теймәй. Ләкин сигенергә хаҡтары юҡ, улар бит ырыуҙың иң батыр ирҙәре.

— Йау! Ау, ау!

Был нимә?! Ҡоттары осто, тораташ булып ҡатты ҡырағайҙар!

2014 йыл. 2—7 март. Малайзия. Куала-Лумпур.

Самат Алтыншин, Рәсәй гражданы, был илгә арта барһа бер аҙнаға тип кенә һуғылғайны. Тотҡарланырға булды шулай ҙа. Туристар өсөн Малайзия үтә лә ымһындырғыс төбәк булып сыҡты. Хәйер, уны турист тип атауы ла ҡыйын хәҙер. Берәҙәк тиһәң, дөрөҫөрәк булыр. Торған ере Вьетнамда, һөйәркәһенең тыуған илендә. Кәйефе шәп саҡта йәки, киреһенсә, күңелен моңһоулыҡ баҫҡанда үҙе белгән башҡортса йырҙарҙың береһен мөңгөрҙәй башлай:

Ҡайҙа ғына бармай,ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы!..

Ҡалған яғына дарманы етмәй, һүҙҙәрен онотҡан. Шуға ла “алдаштырып” (Фәүзиә шулай ти торғайны), йәғни үҙенән өҫтәп бөтөрөп ҡуя. Эх, ысынлап та, ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй ир-егеткәй менән ат башы, яп-яланаяҡ... Бына бит, ике йыл инде ер аяғы, ер башы булған йәһәннәм төпкөлөндә йәшәп ята. Бэтси унын йырына битараф. Бер мәл генә, әле баштараҡ, һүҙҙәрен тәржемә итеүҙе һорағайны:

— Hunny? What's it about? The song I mean?

— About the horse head.

— Horse head? Really? Are you kidding me?

— Yes, I am! It's my grandfathers song. About bashkort warriors fate.

— O, I see. You are so romantic... [2]

3000 йыл элек. Көньяҡ Америка. Ҡайҙалыр Амазония шырлыҡтарында.

Ҡот осҡос күренеш асылғайны алдарында. Салонда сәйер әҙәмдәр ултыра. Дөрөҫөрәге, мәйеттәр... Балаҫ түшәлгән иҙәндә ҡағыҙ киҫәктәре, билеттар, буклеттар. Телевизор ялпылдай. Биш мең йыл айырған киләсәктән пәйҙә булған юлаусылар күптән инде сереп бөткән. Тик ниҙәлер кейемдәре, ботинка-туфлиҙары бөп-бөтөн. Уларҙы ваҡыт алмаған. Бер ирҙең тештәре араһына сигарет ҡыҫтырылған. Унан һаман төтөн сыға, янында ҡунаҡлаған ҡатындың сынаяғынан еңелсә быу күтәрелә. Һөлдәләр тып-тын ултыра, берәү ҙә һөйләшмәй, бәхәсләшмәй, стюардессаны саҡырмай. Бары тик экраны ялп-йолп килгән телевизор ғына шыжылдап-шыжылдап алғылай. Иң алдағы ултырғыста матур галстук таҡҡан һөлдә гәзит уҡый. Иллюминаторҙан төшкән ҡояш нурҙары күҙлегенең алтын ялатылған тирәстәрендә уйнай. Яномауаи яугирҙары мәгәр хәреф таныһа, баҫманың баш юлдарына күҙ һалыр ине, моғайын.

— “Малайзия дэйли”. Көнөнә ике мәртәбә сыға. Бөгөн 2014 йыл, 7 март, йома.

---

[2] — Нимәкәй тураһында ул, йәнем? Йырыңды әйтәм...
— Ат башы тураһында.
— Ат башы тураһында-а-а? Кит әле... Һин мине шаярта-а-а-һың?
— Шаяртам-шаяртам! Ҡартатайымдың йыры ул. Башҡорт яугирҙарының яҙмышы хаҡында.
— Ә-ә-ә... Һин шундай романтик...

Был планетаның теге яғынан осоп килгән, хәҙер инде яҡындары өсөн дә, үҙ ваҡыттары өсөн дә мәңгелеккә юғалған авиалайнер пасажирҙары ине.

2012—2014 йылдар. Көньяҡ-көнсығыш Азия.

Шулай, Вьетнамда ике йыл йәшәп ташланы. Оҡшай, бик оҡшай уға бында. Тәбиғәтенә лә, халҡына ла, Бэтсиға ла эҫенеп өлгөрҙө. Туристик виза Рәсәй азаматтары өсөн бушлай. Әммә ун биш көн үткәс, мәгәр илеңә ҡайтыу ниәтең юҡ икән, рөхсәт ҡағыҙын оҙайтырға кәрәк. Бер аҙ түләргә тура килә. Хәҙер уның хеҙмәт визаһы бар. Эйе, үҙе күптән турист булмағандай, Бэтсиҙы ла кәләше тип әйтеүе ҡыйын. Ысын исемен әйтеп булмай, әйтә башлаһа, ҡыҙ көлөргә тотона. Муй Не ҡаласығындағы бер ҡунаҡханала танышып киткәйнеләр. Бөгөн уға һөйәркә лә, хужабикә лә, гид та, тәржемәсе лә. Түңәрәк кенә йөҙлө, һөрмәле ҡуңыр күҙле, ҡалын ҡара сәсле вьет һылыуҡайы. Башҡорт ҡыҙына ла оҡшап тора. Аҡһыл етен күлдәк, тығыҙ янбаштарын һығып торған еңел салбар кейеп йөрөй. Артыҡ биҙәнмәй, әммә бик һөйкөмлө ҡыҙыҡай, йәше егерме алтыла. Иң мөһиме — холҡо һәйбәт, бер ваҡытта ла тауыш күтәргәне, нимәгәлер дәғүә ҡуйғаны булманы. Юҡ, шулай ҙа саҡ ҡына көнсөлөрәктер. Хәйер, барлыҡ урындағы ҡатын-ҡыҙҙар кеүек. Уныһы насар түгел. Тимәк, ярата... дөрөҫөрәге, яраталыр.

Сит ил туристары Тайланд—Вьетнам—Лаостарға мәгәр яңғыҙҙары ғына килһә, мотлаҡ "ваҡытлы ҡатын" табалар ине. Бындай хәл тропик илдәрҙә ғәҙәти күренеш. Ҡәлтерәп бөткән етмеш йәшлек аҡ тәнле ҡарттың ун һигеҙ йәшлек аҫаба ҡыҙ менән етәкләшеп китеп барыуы берәүҙе лә аптырашҡа һалмай. Былар буддистар бит, һәр төрлө мөнәсәбәттәргә еңел ҡарайҙар. Ләкин Бэтсиҙы һис тә "ваҡытлы" итеп күргеһе килмәй, ундай уй башына ла инеп сыҡманы, шикелле. Бер күрҙе һәм... теге шағир, кем әле исеме, Рәмил Йән.., юҡ, Рәми Ғарипов, шикелле (милли әҙәбиәттә көслө түгел) былай тигән бит:

Ҡайһы саҡта шундай ҡыҙҙар осрай,
Шундай ҡыҙҙар, ят та үл инде...

Шиғырҙың ҡалған яғын белмәй, оноҡҡан күптән, әммә тәүге юлдары шәп. Ҡыҫҡаһы, ҡыҙҙы тәү күреүҙән уҡ оҡшатты, һәм уны ташлап китергә йәки, Аллам һаҡлаһын, "алыштырырға" йыйынмай. Тик үҙен генә ташлап китә күрмәһен.

Бэтсиға уның Рәсәйҙәге элекке тормошо ҡыҙыҡ түгел, ул фәҡәт бөгөнгө менән йәшәй. Юҡ-бар төпсөнөп башты ҡатырмай. Бик шәп массажист, үҙ һөнәрен белә, хәстәрлекле, һәр саҡ ихтирамлы, һөймәлекле. Атаң башы кәрәкме һиңә тағы, Фәүзиә, ен бисәһе, әйтмешләй?

Бер мәл Рәсәй тураһында нимәләр ишетеүен һорашҡайны, ҡыҙҙың белеме иҫ китмәле "киң" булып сыҡты:

— Унда, һеҙҙең илдә, урам буйлап айыуҙар йөрөгән. Элегерәк йөрөгән. Хәҙер йөрөмәйҙәр, сөнки айыу тиреһенән кәпәс тегә башлағандар. Шунлыҡтан ҡырып бөткәндәр!

— Унда, һеҙҙең илдә, бер кем дә сәй эсмәй. Улар "уот-ка" тигән эсемлек эсә. Ул бик шәп эсемлек. Берҙе "кәгеп" ебәрһәң, шундуҡ бейеге килеп китә. Йәки тота килеп йырлай башлайһың!

— Унда, һеҙҙең илдә, халыҡ туҡ йәшәй. Улар ҡап ҡорһаҡлы, ҡыҙыл битле кешекәйҙәр. Уларҙың иң яратҡан шөғөлө — сатлама һыуыҡта ҡарға күмелеп йоҡлау.

Ҡайҙан беләһең быларҙы, тип һораны хайран ҡалған Самат. Сөнки ҡырыҡ биш йәшенәсә Рәсәйҙә тороп та ундай ғәжәйеп хәлдәргә юлыҡҡаны юҡ ине. Әлбиттә, теге мөғжизәле “уот-ка”ны иҫәпкә алмағанда.

— Минең ике туған ағайым Рәсәйҙә йәшәп ҡайтты. Шул һөйләне...

1946 йыл 15 ноябрь. Италия. Рим.

Көмөштәй ялтырап торған хәтәр ҙур самолет килеп ҡунды Чампино аэродромына. Ҡабырғаларында “Malaysian airlines” тигән яҙыуы бар. Бик сәйер. Был хәтле “аждаһа”ны әлегәсә күргәндәре юҡ ине... Ул бер рейсҡа ла ҡарамай, осоштар графигында ла юҡ, чартер ҙа түгел. Ғөмүмән, һис ҡайҙа ла теркәлмәгән, фәҡәт әллә ҡайҙарҙан осоп килгән! Ҡарабинерҙар самолетты уратып алды. Көтә бирҙеләр, тик эстән бер кем дә сыҡманы. Ниһәйәт, радиобәйләнеш булдырылды. Экипаж командирының тәүге һорауы шул ине:

— Беҙ ҡайҙабыҙ?

— Римдә, сеньор!

— Нисек Римдә?!

— Шулай. Ә һеҙ кем? Рейстың номеры?

— Рейс “МН—370”. Малайзиянан Ҡытайға осабыҙ! Пекинға!

— Ләкин был Пекин түгел! Был Рим! Ғөмүмән, һеҙ халыҡ-ара осоштар графигында юҡ!

Радиобәйләнеш өҙөлдө. Көтөлмәгән ҡунаҡтар, күрәһең, уйға ҡалдылар. Унан пилоттар кабинаһының тышҡы ишеге асылды, оло ғына капитан күренде. Ул үтә лә ят, ниндәйҙер сәйер униформала ине.

— Тимәк, был Италия? Һеҙ шаяртмайһығыҙ?

— Эйе, Италия! Пекинығыҙҙан 17 мең саҡырым көнбайыштараҡ!

— Нисек инде улай?

— Шулай. Сеньор, ҡасан булырға тейешһегеҙ Пекинда? — Хәрбиҙәрҙең башлығы һорау бирҙе.

— Сәғәт 04 тә 40 минутта. 8 март көнө...

— Нисек 8 март? Әле бит 15 ноябрь!

— 15 ноябрь?

— Эйе, сеньор! 15 ноябрь, 1946 йыл...

— Мең туғыҙ йөҙ... ҡырыҡ алтынсы???

Экипаж командиры ағарынып китте. Быларға йүләр кеше һымаҡ ҡарап торҙо-торҙо ла кабинаһына ташланды. Тиҙҙән моторҙар енләнеп тоҡанды. Алыҫ киләсәктән осоп сыҡҡан самолет билдәһеҙлек томанына инеп юғалды...

2014 йыл, 7 март. Малайзия. Ҡуала-Лумпур.

Бэтси менән урам аша сығып, кафела ҡапҡылап килделәр. Ҡояш инде баш өҫтөндә тора, тын алғыһыҙ дымлы эҫелек хакимлыҡ итә. Ни ҡылаһың, экватор эргәлә генә бит. Әле генә шаулап ямғыр ҡойоп үтеп китә, әле генә ҡояш ҡыҙҙыра башлай, ә унан инде күләгәлә 32 градус! Бары тик кондиционер ҡуйылған фойела һәм бүлмәләрҙә генә еләҫ. Бэтси һорашмаһа ла, Самат элекке ҡатыны менән булған таңғы һөйләшеүҙе бәйән итте. Туйға ҡайтырға кәрәк, бөгөн үк юлға сығырға тура килер. Ә инде үҙебеҙҙең ижәпте мин йөрөп ҡайтҡас уҡытырбыҙ, Вьетнамда ла барҙыр бит берәй мәсет... Һөйгәненең сырайы ҡараңғыланды, байтаҡ ваҡыт өндәшмәй торҙо.

— Һин мине ташлап китәһеңме? — Ҡыҙ ышанманы, шикелле. Нәҙек бармаҡтарында телефонын уйната, тегеләй борғолай, былай борғолай. Күҙҙәренән эре-эре йәш тамсылары бәреп сыҡты.

— Юҡ, һин нимә? — Самат уны ҡосағына алды. — Һин нимә, йәнем? Мин мотлаҡ ҡайтырмын!

Ҡыҙыҡ, “ҡайтырмынмы” бында, сит илгә, һөйгәнем янына, әллә... әллә шулай ҙа “килерменме”? Ҡайһыһы дөрөҫөрәк?

— Туйҙы үткәрермен дә мотлаҡ ҡайтырмын!

2015 йыл. 9 июль. Көньяҡ Урал, Рәсәй.

Ямантауға яҡынайып килгән билдәһеҙ осоусы объект тураһында йыһан юлдашынан мәғлүмәт алынды. Шуныһы ғәжәп, ерҙәге радиолокацион ҡорамалдар уны һиҙмәй ҙә ҡалды. Әйтерһең дә самолет түгел (ләкин һауа лайнеры икәненә шик юҡ), ә күҙгә салынмаҫ, тәнһеҙ-йәнһеҙ бер шәүлә. Президент был мәл Өфөлә барған халыҡ-ара осрашыуҙа ине. Бразилия етәксеһе менән ике сәғәттән ашыу барған әңгәмәнән сығып ҡына тора ине. Тиҙ арала хәлде һөйләп бирҙеләр. Объект инде хәрбиҙәр һаҡлаған ер аҫты ҡалаһына килеп еткәйне. Радиобәйләнешкә инергә маташыуҙарға төкөрөп тә бирмәҫтән осоуын дауам итә.

— Был провокация булыуы ихтимал, — тине ил башлығы.Тиҙ арала хөкүмәт элемтәһе буйынса оборона министрына бәйләнешкә сыҡты. — Булған ғәскәрҙәрҙе, шул иҫәптән стратегик авиацияны ла тулы әҙерлек һыҙығына баҫтырырға! Ядро көстәрен ғәҙәттән тыш әҙерлеккә килтерергә! Ҡисекмәҫтән! Ямантау айырым һаҡлау төбәгендә пәйҙә булған билдәһеҙ объектты, әгәр ҙә бәйләнешкә сыҡмаһа, атып төшөрөргә!

Йәнә дүрт минуттан истребителдәр эскадрильяһы билдәһеҙ самолетҡа ҡаршы күтәрелде. Тик тегеһе тотҡан йүнәлешен үҙгәртергә уйламаны ла. Туптура осоп барып, үтеп тә китте. Улар аша үтеп китте! Үтеп китте лә һә тигәнсе күҙҙән юғалды...

2011—2012 йылдар. Башҡортостан. Өфө.

Сит илгә сығып китеүе былай булды. Һөйләһәң һүҙ, төртһәң күҙ, тигәндәй, тарихы шаҡтай оҙон. Бер мәл бисәһе менән һүҙгә килештеләр. Хәйер, һуңғы йылдарҙа уныһы ғәҙәти хәлгә әүерелгәйне. Барыһына ла әлеге лә баяғы аҡса етмәү сәбәп булды.

— Ана, Розаның ире йәнә бер магазин асҡан...

— Ана, Фәрит Клараһына тун алып биргән! 130 мең һумға! Ә мин, бахыр, мынау аламаны өсөнсө йыл кейәм...

— Тимерйән бисәһен санаторийға ебәргән. Ҡыш ҡына барып ҡайтҡайны, тағы ла киткән, ти! Ә мин, бахыр...

Милли китапханала һирәк ҡулъяҙмалар архивында белгес булып ултыра ине ул саҡта. Архивариустың хеҙмәт хаҡы бесәй төкөрөгөндәй генә, шиншилла тундың еңенә лә етмәй... Бурыстар ҡыуыфы көндөң-көнө ҡабарына барып, инде шартлар хәлгә килеп терәлде. Туғандары ла, таныштары ла үтескә бирмәй башланы. Аптырағас, машинаһын һатып ебәрҙе, кредитты ҡапланы. Ҡатыны бер аҙ тыныслана төштө. Өҫтәүенә, йәнә бер шатлыҡлы ваҡиға булды: шул йәйҙә берҙән бер улдары Артур колледжға уҡырға инде, Алла бирһә, программист

һөнәрен аласаҡ. Ләкин... ләкин “иртән уңмаҫ — кис уңмаҫ, кис уңмаған һис уңмаҫ”. Көтмәгәндә үҙен эштән ҡыҫҡарттылар, ғаилә Фәүзиәнең наҡыҫ ҡына һатыусы аҡсаһына күҙ терәп тороп ҡалды. Унан йәнә янъял усағы тоҡанды, йәнә ҡашығаяҡ шылтырай башланы. Бисәһен дә аңларға була, әлбиттә. Барлыҡ яраштыра, юҡлыҡ талаштыра... Өҫтәүенә, ҡырын тейәп ҡайтырға ғәҙәтләнә башлағайны. Ҡайһы ваҡыт аҙналап юғалғылай ине.

— Сығып кит! Миңә квартирант кәрәкмәй!

— Фәүзиә... Һуң мин ҡайҙа сығып китәйем?

— Ҡайҙан туйып ҡайтаһың, шунда кит!

— Фәүзиә, мин төҙәләм!

— Төҙәлгәс, килерһең!

Китте Самат, көндәлек илаш-ҡарғышҡа түҙмәне. Суҡынып ҡатығыҙ... Байтаҡ ваҡыт элекке курсташында ҡунып йөрөнө. Йүнле эш таба алманы, ҡайҙа йөк тейәүсе, ҡайҙа курьер, ҡайҙа ҡарауылсы булып икмәк-тоҙлоҡ әтмәләй ине. Ҡара көҙ еткәс, картатаһы көн кисергән төпкөл ауылға барып ятты, шундағы бер хәлле фермерҙың малын ҡараны. Теге аҡса түләмәне, 90-сы йылдарҙағы һымаҡ ҡатнаш аҙыҡ, он-шәкәр менән иҫәпләшә ине. Февраль баштарында ғына дүрт мең һум аҡса ҡулына эләкте, һәм вәссәләм. Оҡшаманы, китте күк үләнгә аяҡ баҫыу менән. Ҡатынына кире ҡайтып ҡарағайны, ике аҙна самаһы ғына бергә йәшәп ҡалдылар, йәнә өйҙән ҡыуып сығарҙы.

— Миңә квартирант кәрәкмәй!

Унан тормошон тамырынан үҙгәрткән бер осрашыуға тарыны.

Бынан 5 миллиард йылдар элек. Ҡайҙалыр ғәләм киңлектәрендә.

Ер планетаһы әле тыумаған. Ҡояштың тартыу көсө йыһанда тәртипһеҙ рәүештә осоп йөрөгән астероидтарҙы бер болотҡа ҡыуып килтерҙе. “Ҡыҙған таба” тирәләй әйләнгән ҡара таштар тора-бара бер йәҙрәгә уҡмашты. Тиҙҙән уларҙың радиоактив өлөшсәләре тарҡала башланы һәм эҫе бүлеп сығарырға тотондо. Буласаҡ ер йөҙө йылынды һәм, һөҙөмтәлә, астероидтар шары нығ ҡына йомшарҙы, еңелерәк минералдар өҫкә ҡалҡып сыҡты, ауырҙары аҫҡа батып төштө. Буласаҡ планетаның ҡабығы хасил булды. Аҫта иһә, ер үҙәгендә магма — утлы диңгеҙ яралды. Тиҙҙән ундағы химик реакциялар һөҙөмтәһендә өҫкә һыу һарҡып сыҡты, ул һыуынған ҡаты ҡабыҡтың уйһыу урындарында тупланды. Тора-бара планетаны газ болото уратты. Атмосфера хасил булды, йыһандан ҡара таштар ҡолап төшмәй башланы. Диңгеҙҙәрҙә бер күҙәнәкле тәүге организмдар яралды. Әҙәм тыуыуға 4 миллиард ярым йыл ҡалғайны.

Ләкин кешелектең бәғзе бер вәкилдәре был шыҡһыҙ донъялыҡта булып та өлгөргәйне. Мәйеттәр һәм тереләр тейәлгән көмөш “Боинг” ҡайнап-ташып, хәтәр урғылып ятҡан боламыҡ һыу өҫтөнән үтеп бара ине...

2012 йыл, апрель. Башҡортостан. Өфө.

Ул көнө кисләп ҡайҙандыр ҡайтып килә ине. Апрель баштары, ләкин һалҡынса ел иҫә, ярайһы уҡ һыуыҡ ине. Октябрь проспектында иғлан күреп ҡалды. Эре хәрефтәр менән компьютерҙа баҫылған. Баҡһаң, “Сәйәхәтсе” туризм һөйөүселәр клубында осрашыу була, имеш. Кемдер ҡайҙандыр ҡайтҡан, нимәлер һөйләргә ниәтләй. Китап һатасаҡтар. Адресына ҡарағанда, яҡын ғына. Йортто һә тигәнсе

эҙләп тапты, янында торған йәштәр төркөмөн абайланы. Бына улар бинаның ҡабырғаһындағы подвалға төшә башланы. Береһе Саматҡа ҡул болғаны:

— Тиҙерәк булығыҙ, башлайбыҙ!

Эйәрҙе арттарынан. Өшөгәйне. Исмаһам, йылынып сығырмын, тип өмөтләнде. Фатирға барыуҙың мәғәнәһе юҡ, саҡ ҡына алдараҡ дуҫы шылтыратҡайны:

— Ҡартлас, бөгөн һуңыраҡ ҡайтһаң да була. Юҡ, хатта иртәгә ҡайтһаң да рөхсәт! Үпкәләмә, дуҫҡай. Мин әле яңғыҙым түгел, аңлап тораһың бит инде!

Аңлашыла. Һуңғы аҙнала Тимурға, өмөтһөҙ ҡарт буйҙаҡҡа, үтә лә әрһеҙ бер ханым эйәләшкәйне. Тимәк, икенсе төн рәттән вокзалда ҡунырға тура киләсәк... Шулай инде. Ул бит эт типкеһендә йөрөгән өйһөҙ-эшһеҙ-ғаиләһеҙ асарбаҡ.

Билдәле яҙыусы һәм эшҡыуар Рудольф Павлов менән осрашыуға ун биш-егермеләп кеше йыйылғайны. Күпселеге йәштәр, ғәмәлдә студенттар. Пенсионерҙар бар. Көньяҡ ҡояшында йоморо икмәктәй һарғайып янған бабай бик һүҙсән булып сыҡты. Ауыҙын бер асҡайны, башҡаса япманы ла ҡуйҙы. Ике сәғәттән ашыу аҡыл һатты. Һөйләгәненең мәғәнәһе шул. Беҙҙә насар, ә унда яҡшы. Ҡайҙа яҡшы, тип һорарға уйлайһығыҙмы? Яуап бирәм! Вьетнамда яҡшы! Камбоджала яҡшы! Тайландта ла яҡшы! Бына минең, мәҫәлән, Вьетнамда бизнесым бар, йәш бисәм бар, өйөм бар. Бында иһә, Өфөлә, бер нәмәм дә юҡ! “Хрущевкалағы” фатирымдан башҡа... Тағы ла Лаоста яҡшы, Малайзияла. Ә бына һеҙҙә, йәғни беҙҙә, Рәсәйҙә, насар! Ни өсөн насар? Аңлатам. Сөнки беҙҙә һыуыҡ. Был бер. Ә унда — йылы! Һәр саҡ йылы! Беҙҙә бандиттар һәм ришүәтселәр. Ә унда... Юҡ, унда ла бар ул бандиттар һәм ришүәтселәр. Ләкин унда бит барыһы ла йылмайып йөрөй! Иң яғымлы йылмайғандары нәҡ ана шул ришүәтселәр... Әшәкеләр, әлбиттә! Әшәкеләр! Ләкин яғымлы әшәкеләр. Был ике. Өсөнсөнән, унда беҙҙеңсә ун биш мең һум аҡсаң булһа, бер ай теттереп йәшәргә етә! Ә беҙҙә, блин...

Рудольф Петрович кескәй йоҙроғо менән гонаһһыҙ өҫтәлгә тондорҙо:

—Блин! Һәм ошомо инде фашизмды еңгән ил?!

Бер аҙ коньяк эсеп килгәйне, шуға ла теле сиселгәйне. Үҙе йәшәп ятҡан Вьетнам тураһында фильм күрһәтте лә, ниһәйәт, бер аҙға тынды. Арығайны. Битараф ҡына һораны:

— Оҡшанымы?

Халыҡ “уһу” тигәнерәк ауаздар менән яуапланы. Һорауҙар китте. Унан ҡарт ҡап ҡорһаҡлы юл биштәренән китаптар килтереп сығарҙы. Өҫтәлгә ырғытты ла йәнә вайымһыҙ тауыш менән өндәште:

— Ана шуларҙың барыһын да мин китап итеп яҙғанмын. Алығыҙ, ҡиммәт түгел...

Рудольф Петровичтың ауҙа итеп бөткәнен Самат күндәм генә көтөп алды. Барыбер ашығырға урын юҡ. Бабай менән тиҙ дуҫлаштылар. Ауыр рюкзагын (унда һатып бөтмәгән китаптар менән сувенирҙар һалынғайны) фатирына тиклем алып барышты. Ҡарт торлағын ҡуртымға биргән, әле квартиранттары ауылға ҡайтып киткән икән. Шуға ла иркенләп төнө буйына мәжлес ҡороп ултырҙылар. Бабай байтаҡ “тейәгәс”, яңы дуҫын үҙе янына, Вьетнамға күсереп алырға булып китте.

— Сэмми! Беҙ дуҫтар! — Зәңгәр күҙҙәрен төбәп, әйтерһең дә үҙе әйткәненә үҙе ышанмай, байтаҡ тексәйеп ултырҙы.

— Дуҫтар! Мин һине был һаҙ-лыҡ-тан, Сэмми, ишетәһеңме, һаҙ-лыҡ-тан йолоп алам! Мин һинән эшҡыуар яһайым! Вьетнамда! Юлыңды түләйем! Тулыһынса түләйем! Йәшәү-ашауыңды түләйем! Тулыһынса! Сөнки һин шәп кеше! Бөйөк кеше! Ишетәһеңме, бөйөк кеше!

2805 йыл. Сентябрь. Ҡайҙалыр төньяҡ Африкала.

Был — ожмах. Йәм-йәшел оазис. Пальмалар. Уларҙа кокос сәтләүектәре. Хуш еҫле сәскәләр. Емеш-еләкле ҡыуаҡтар. Сағыу ҡанатлы ҡоштар. Күбәләктәр. Алыҫта тауҙар зәңгәрләнә. Ап-аҡ түңәрәк өйҙәр. Һауала үтә күренмәле ҡыуыҡ шарҙар. Улар берсә осоп китә, берсә һауала аҫылынып тора. Һәр ҡайһыһының эсендә берешәр-икешәр кеше. Йыһандан ғәжәп моң тарала. Тәбиғәт ҡояш нурҙарында иҙрәй.

Түңәрәк кенә матур күлдә сибәрҙәрҙән сибәр, гүзәлдәрҙән гүзәл хур ҡыҙҙары һыу төшә. Сәстәре аяҡ остарына етеп тора. Тәндәренә ҡунған тамсылар ынйылай ялтырай. Беҙҙең пассажирҙар, — терееләр һәм әруахтар, — улар араһында. Сыр-сыу киләләр. Улар шат һәм бәхетле... Эйе, был — ожмах... Ләкин юлдағыларҙың юлда булыуы хәйерле. Көмөш “Боинг” һауаға күтәрелә.

2012—2014 йылдар. Рәсәй. Көньяҡ-көнсығыш Азия.

Рудольф Петрович май бөткәнсе Өфөлә булды. Аҡбирҙе ҡасабаһына яҡын баҡсала дачаһы бар ине. Самат шунда ҡуна башланы, өй электр уты менән йылытыла ине. Бер ыңғайы шыңғырҙап торған Бөрйән ҡарағайынан мунса һалып бирҙе. Һуңынан Тимур менән, элекке курсташы, ҡарттың фатирында евроремонт эшләнеләр. Хужа һаман да өгөтләүен белде, алтын ҡуллы оҫтаны үҙе менән алып китергә ныҡлап ҡарар иткәйне. Әммә Саматтың һис кенә лә уға эйәреп сығып киткеһе килмәй ине. Башына тай типкәнме ни уның? Эшһеҙ-ғаиләһеҙ-торлаҡһыҙ асарбаҡ булһа ла, тыуған ере бында... Ләкин бер көнө тотто ла ҡыҙыу баштан барыһын да өҙә һуҡты.

Былай килеп сыҡты. Ҡала ситендәге супермаркетҡа “доширак” ашы алырға ингәйне. Ҡараһа, ҡатыны ниндәйҙер күҙлекле һонтор менән аҙыҡ-түлек һайлап йөрөй. Арттарынан эйәрә сыҡты, күҙәтә барҙы. Ҡултыҡлашып урам буйлап китте былар, унан парковкала торған өр-яңы “тойота”ға ултырҙылар. Бер-береһенә инеп баралар. Эштәре көйлө быларҙың. Мөхәббәт, яп-яланаяҡ... Әйҙә, суҡынһындар...

Шул кисте һуҡмыш килеш барып “аңлашып” йөрөнө. Бисәһе менән килешергә, ҡырҡылған икмәкте кире бөтәштерергә ине ниәте. Тик килеп сыҡманы. Ишекте теге һонтор ир асты. Нимәлер уҡмашып көйгән таба тотҡайны, икенсе ҡулында — сепрәк.

— Һеҙгә кем кәрәк, ғәфү итегеҙ?

— Миңәме?

— Һеҙгә?

— Мин... мин ошо өйҙөң хужаһы!

Күҙлекле “колға” ҡатып ҡалды. Төҫһөҙ күҙҙәрен алан-йолан килтерҙе.

— Хужаһы?

— Эйе хужаһы!

— Ә-ә, төшөндөм, һеҙ Самат...

— Эйе, мин Самат! Ә һин, давай, һыҙ бынан!

“Ҡолға” ауыҙын асып торған арала аш бүлмәһенән сикһеҙ ярһыған Фәүзиә килеп сыҡты.

— Ах, ҡороғор!

— Һыҙ, һыҙ, давай!

— Бирермен мин һиңә “һыҙ”ҙы!

Һәм “ҡолға”ның ҡулындағы табаны эләктереп алып, ирҙең башына тондорҙо. Ғүмере былай ҡыланғаны юҡ ине.

— Бирермен “һыҙ”ҙы! Алкаш! Бында килеп тороп ишшу!

Тулы кәүҙәле көслө ҡатын ул, ҡарыулы ҡатын. Ҡөтөлмәгән тондороуҙан һуҡмыш ир артына ултыра төштө. Фәүзиә ишекте шартлатып бикләп ҡуйҙы.

— “Һыҙ” үҙең! Хәҙер милиция саҡыртам!

Иң ғәрләндергәне — таба менән түбәһенә алыу! Ауыртыныу үтте лә китте, ороһо ла кире шиңде. Тик ниндәйҙер үпкәләү, намыҫланыу тойғоһо тороп ҡалды. Әйтерең бармы, бисәң таба менән туҡмаһын әле. Һәм кемде яҡлап бит әле...

Йәнә бер айҙан рәсми рәүештә айырылыштылар. Улы дөйөм ятаҡҡа күсенеп, дуҫтары менән йәшәй ине, быға са уға барғылап йөрөнө. Хәҙер иһә аралары тамам һыуынды. Үҫмер әсәһенең һүҙенән сыға алмай. Ҡөндөң-көнө, айҙың-айы, йылдың-йылы тартыла килгән ҡыл, эстәге ихтыяр ҡылы, шул мәл зыңлап өҙөлдө. Барыһына ла ҡул һелтәне. Суҡынып китһендәр! Вьетнамға икән, Вьетнамға!

1616 йыл. 20 декабрь. Ҡайҙалыр Тымыҡ океан киңлектәрендә.

Океан аҫтынан егерме ете ут йомғағы күтәрелде. Ҡот осҡос тәрән, дөм-ҡараңғы һыу төпкөлөнән сыҡты улар. Оҙон сынйыр булып теҙелделәр ҙә төнгө күккә менеп киттеләр. Сит планета караптары ине был, Айҙағы базаларына ҡайтып барыуҙары. Йым-йым. Йым-йым. Уттары төрлө төҫтәр менән балҡый. Йондоҙҙармы ни? Бына улар берәҙәк “Боинг” алдынан ашыҡмай ғына үтеп китте. Арттарынан ғәжәйеп һағышлы, ерҙә булмаған һәм булыуы ла мөмкин түгел моң ишетелә биреп ҡалды...

2012—2014 йылдар. Көньяҡ-көнсығыш Азия.

— Һин бөйөк кеше! Мин һине был һаҙлыҡтан алып сығам!

“Бөйөк кеше” бабайҙың шәхси цехында ике йылға яҡын бил бөктө. Өфөнән Ҡамрань аэропортына осҡан самолет хаҡын, унан һуңғы сығымдарҙы икеләтә ҡайтарҙы. Рудольф Петрович океан ярындағы Муй Не тигән курорт ҡасабаһында төпләнгәйне. Үҙе кеүек бында йәшәгән Рәсәй эшҡыуарҙарына һәм туристар өсөн икмәк бешерә. Ризыҡ бик үтемле, кәсеп шәп бара. Был төбәкте “Ҡесе Рәсәй” тип йөрөтәләр икән, сөнки элекке союздаш республикаларҙан сыҡҡан халыҡ мыжғып тора. Үҙенә күрә “Брайтон-бич”...

Ирҙең бурысы шунан ғибәрәт — эргәлә ятҡан Фанхъет ҡалаһынан он һатып алып килә, ҡамыр баҫа, уны форма-табаларға һалып сыға, мейескә индереп яба, бешкәс кире ала. Эш буйынса мотоцикл менән йөрөй, бының өсөн документ-фәләндең хәжәте юҡ. Урам ҡағиҙәләрен белеү кәрәкмәй ҙә. Ҡем алдан сигнал биреп өлгөрә, шуға юл бирәләр, ул өҫтөнлөклө хоҡуҡтарға эйә була... Иртәнге сәғәт алтынан төнгө ундарға тиклем ҡара тир түгә. Ярай әле цехта көнө-төнө эшләп торған кондиционер бар, юғиһә бындағы эҫегә сыҙарлыҡ түгел. Рудольф

Петрович иһә үҙе һатыуҙы ойоштора, партнерҙар менән эшлекле мөнәсәбәттәр ҡора, власть әһелдәре менән бәйләнеш тота. Бында “бөйөк кешенән” башҡа йәнә дүрт кеше эшләй, улар Павловтың йәш ҡатыны Вонг ханымдың ҡул аҫтында. Йәшәгән урыны ла, ашаған урыны ла ошонда. Ҡондиционер һәм душ бар, иҙәндә иҫке түшәк, керләрәк япма, ҡаты яҫтыҡ. Тамағы туҡ, өҫтө бөтөн. Бейсболка, күлдәк-ыштан, сандалийҙар. Башҡа бер ниндәй сығым юҡ. Ике тапҡыр Артур улына аҡса һалды, 500-әр долларҙан.

Бынан 3000 йыл элек. Ҡайҙалыр Амазония шырлыҡтарында.

— Ай! Ау-ау!

“Тимер ҡош”тоң алғы ишеге асылды. Һәм унан кеше хасил булды! Мәйет түгел... ә тере кеше тора ине алдарында! Ҡара Ягуар менән Ҡанлы Һөңгө ҡот осҡос тауыш менән аҡырып ебәрҙе...

2012—2014 йылдар. Көньяҡ-көнсығыш Азия.

Бэтси менән танышыуҙары иһә мәҙәк кенә килеп сыҡты. Йәкшәмбе көнө ҡарт ял бирә ине. Цехта эт тә ҡалмай. Ваҡыт күп. Теләһәң, океанға барып һыу төш, теләһәң — ҡыҙҙар килтер, теләһәң — түшәмгә текләп тик ят. Мәйелең. Бер мәл, ғинуар аҙаҡтарында, Самат эргәләге ҡунаҡханаға эш белешергә китте. Бабайҙың үҙенән дә, уның ҡупырыш бисәһенән дә, бер төрлө тормоштан да ялҡа башлағайны. Хеҙмәт хаҡы ла шәптән түгел.

Отель директоры урынында булмай сыҡты. Рэсэпшенда, йәғни ҡунаҡтарҙы ҡабул итә торған мөйөштә ике ҡыҙ менән һөйләшеп китте. Былар инглизсә ҡәҙимге һупалай ине. Береһе, администратор туташ, донъя әҙәбиәте буйынса Фанхъет университетында һабаҡ биргән икән. Элекке уҡытыусы, бик белемле, бик үткер. Саматҡа талпан һымаҡ ҡаҙалды, “шул авторҙы беләһегеҙме, ә быныһын, ә тегеһен? Мин, ғөмүмән, Рәсәй әҙәбиәтенә ғашиҡмын”... Форсаты сыҡҡанда инглизсә аралашып ҡалырға теләйҙәр ине, шикелле. Элекке архивариусҡа яуап биреүе ауыр түгел, тик бәғзе ваҡыт тегеләрҙе төшөнөп бөтмәй. Көньяҡ-көнсығыш Азияла “пиджин инглиш” (“күгәрсен инглизсәһе”) тип йөрөтөлгән һаҡауыраҡ телдә һөйләшәләр ине. Матур ғына бер ҡыҙ ситтәрәк компьютер экранына текәлеп ултыра. Әңгәмәгә ҡыҫылмай, әммә йәшертен ҡарап-ҡарап ала. Бер мәртәбә күҙҙәре осрашҡайны, ҡыҙарынып киткәндәй булды. Тиҙ генә ҡарашын аҫҡа төшөрҙө, ниңәлер ауыҙын усы менән ҡапланы.

Икенсе ялында тағы ла килде. Теге оялсан ҡыҙ күренмәҫме икән? Эсендә кескәй генә өмөт, ниндәйҙер дәрт осҡоно тоҡанғайны. Түрә был юлы өйҙә булып сыҡты.

— Ул ана китте, ана-ана! — рэсэпшен хеҙмәткәрҙәре шатлыҡлы ҡысҡырып ҡаршыланы. Шул уҡ күренеш. Ике хеҙмәткәр өҫтәл артында тора, ситтәрәк теге матур ҡыҙыҡай ноутбук ҡарап ултыра. Әйтерһең дә айырылышҡандарына бер аҙна түгел, ә бер минут та юҡ...

“Ана киткән” директор артынан йүгерҙе, уныһы бунгалоларҙы ҡарап йөрөй икән. Таныштылар. Тырҗыҡ танаулы, урта йәштәрҙәге ир, Ло Шинь әфәнде. Бик ябай, бик ябыҡ, һис тә түрәгә оҡшамаған. Ҡара салбар, аҡ күлдәк. Галстук таҡмаған. Вакансия әлегә юҡ, тине, ләкин тиҙҙән үҙебеҙҙең экскурсиялар хеҙмәтен ойошторабыҙ, ул саҡта урыҫ-инглиз телле гидтар кәрәк буласаҡ.

Телефонығыҙҙы ҡалдырығыҙ, шылтыратырбыҙ... Алғараҡ китеп шуны әйтәйек: аҙаҡ уны оноттолар, эшкә саҡырыусы булманы.

Йәнә рэсэпшенға килде, сәй тәҡдим иттеләр, йәнә хәбәр һата башланылар. Ҡәйефе шәп ине.Теге ҡыҙ тураһында белеште. Ниңә ҡатышып китмәй һөйләшеүгә, әллә инглизсә белмәйме? Белә, тип яуапланылар, тик ул ояла...

— What's up? Is she o'key?

— O'key! O'key! She shyes only!

Һуңғы һөйләм, йәғни "ши шайз", "ул ояла" тип әйтелгән хәлдә лә, "си сайз" булып ишетелде. Был иһә бөтөнләй икенсе мәғәнәне, "диңгеҙ тулҡынлана" тигәнде бирә. Ҡыҙыҡайҙың ҡылтайып тороуында диңгеҙҙең ни ҡыҫылышы бар икән, тип ғәжәпләнде Самат. Унан ҡабатлап һораны, шул уҡ яуапты алды — "си сайз". Аҙаҡ ҡағыҙға яҙып биреүҙе үтенде, дәфтәр битенә, ниһәйәт, дөрөҫ мәғәнә төштө. Ул, Бэтси, ояла. Һинән ояла...

Вьетнамдар "ш" урынына "с" тиҙәр, бәғзе ваҡыт "р" өнөн "л" менән алыштыралар. Һөҙөмтәлә тел үҙенсәлектәрен белмәгән сит ил кешеһенең башы бутала. Хатаны аңлағас, Самат рәхәтләнеп көлдө, нимәгә ауыҙ йырыуын тегеләргә лә аңлатты. Шунан ҡыҙҙарҙы кафеға саҡырҙы, тик улар был көндө бушай алманы.

Бер көнө мотобайк менән он алып ҡайтып килгәнендә (бында хатта йорт йыһаздарын да мотоциклда ташыйҙар) автобус туҡталышында торған теге оялсан ҡыҙҙы шәйләп ҡалды. Бэтси ла уны таныны. Йөҙөнә ҡояш ҡунды, ап-аҡ тештәрен ялтыратып йылмайып ебәрҙе. Һөйләшеп киттеләр. Яндарына килеп еткән урам һатыусыһынан тәмле генә емеш — линьчжи һатып алды, ҡыҙҙы һыйланы. Тегеһе бигүк оялсан да түгел икән, баҡһаң. "Теге көнө мин тешемде һурҙырғайным..." Баяғы ҡунаҡханала салонда эшләй, массаж оҫтаһы. Инглизсә бик шәп белә. Илгиҙәк, алсаҡ ҡыҙ. Шунан бирле осраша башланылар.

Бэтси менән танышҡас, тормошо бермә-бер йәнләнеп китте. Өфө лә, яҡындары ла төштәренә һирәгерәк инә башланы. Ул илһеҙ, тамырһыҙ берәҙәккә әүерелде. Ләкин уның хәҙер һөйгәне, тимәк, үҙенә күрә ғаиләһе бар ине.

2014 йыл. 16 март. Вьетнам. Нячанг ҡалаһы. Самолет юғалғандан һуң бер аҙна үткәс.

Фан Куин Тонг, даны сыҡҡан күрәҙәсе. Ярым һуҡыр ул, әммә быуаттар аша күрергә һәләтле. Бэтсиҙы төштән һуң ҡабул итте. Ҡорамдың төпкөлөндә алтын ялатылған ҙур Будда һыны. Тирә-яғы ҡағыҙ фонарҙәр, сәскәләр үреме менән биҙәлгән. Шәмдәлдәр яна. Хуш еҫле үләндәр еҫе таралған.

Ун минут самаһы үҙ-үҙенә йомолоп, күрәҙәсе тын ултырҙы. Унан аҡ шекәрә баҫҡан күҙҙәрен асты, тауышы көтөлмәгәнсә ҡырҡыу, йәш яңғыраны, хатта зыңлап китте:

— Самолет һыуға ла батмаған, ҡаяға ла бәрелмәгән, урманға ла ҡолап төшмәгән. Ул ваҡыт арауығында аҙашҡан. Унда-бында һуғылып, өс донъя араһында осоп йөрөй... Үткәндәр, бөгөнгө, киләсәк араһында.

— Тимәк, ул тере...

— Һөлдәләрҙе күрәм, кешеләрҙе күрәм...

— Ул ҡайтырмы? — Бэтси түҙемһеҙләнеп һораны. Күрәҙәсе йәнә тын ҡалды. Тәү ҡарашҡа хатта серемгә киткән төҫлө ине. Йәнә ҡырҡыу тауыш менән өндәште:

— Эйе! Ҡасан да булһа ирегеҙ әйләнеп ҡайтыр... Тик ҡасан, ҡайҙа, ни ҡиәфәттә, — уныһын бер кем дә белмәй... Ғөмүмән, үлем юҡ. Беҙ һәммәбеҙ ҙә кешенән йәнлеккә, йәнлектән бөжәккә, бөжәктән емешкә, емештән һыу тамсыһына, һыу тамсыһынан тағы ла әллә нимәләргә күсеп... яңынан әҙәмгә әүереләбеҙ...

2013—2014 йылдар. Көньяҡ-көнсығыш Азия.

Университетта буласаҡ архивариустарҙы инглиз теленә лә өйрәткәйнеләр. Бик тә ярап ҡалды. Тиҙҙән вьет телендә лә һин дә мин һупалай башланы. Урындағы ғөрөф-ғәҙәткә, йола-дәстүргә, дымлы һауаға ла, бындағы ят еҫтәргә лә яйлап күнекте. Башҡортостан иҫенән сыҡмаһа ла, һағыныу тойғоһо яйлап тупаҫланды. Бары тик булмышын һәр саҡ ниндәйҙер төйөр өйкәп торғандай.

2014 йылдың февралендә Самат хужа менән хушлашты. Тегеһе һис тә ебәргеһе килмәй ине үҙен, әммә һәр кемдең үҙ яҙмышы... Хеҙмәт хаҡына тос ҡына премияһын да ҡушып, автовокзалға тиклем оҙатып ҡалды. Бабайҙы һаранға һанай ине Самат, ни тиһәң дә, аҡсаны бик самалап түләй ине, айырыуса баштараҡ. Шуға ла бындай йомартлыҡты көтмәгәйне. Рудольф Петрович ғәҙәтенсә шапыртып өндәште:

— Сэмми! Ҡире килһәң, шундуҡ алам! Ишетәһеңме? Сөнки беҙ дуҫтар! Сөнки һин бөйөк кеше!

Бөйөклөгө нимәлә сағыла торғандыр инде, уныһын ҡартлас тәки әйтмәне. “Һин бөйөк кеше”, һәм вәссәләм!

2031 йыл. 17 октябрь. Вьетнам.

Бэтси аэропортта ултыра ине. Баш ҡаланан ҡыҙы Кэт ҡайтырға тейеш, шуны ҡаршыларға килгәйне.

Көтөү залында кеше юҡ тиерлек. Теге оста теркәлеү стойкалары. Кафе. Сувенир павильондары. Икенсе ҡатта таможня тикшереү хеҙмәте. Сик һаҡсылары. “Хошимин—Нячанг” рейсын көтөүселәр. Урам яҡта таксистар тәмәке көйрәтә.

...Ҡапыл ишектәр асылды, шаулашып халыҡ килеп инде. Килеп инде, улар бик күп ине... әммә бер кем дә күренмәне!!! Ҡысҡырышалар, бер-береһен ҡабаландыралар, үҙ-ара талашып та китәләр. Юл сумкаларын иҙән буйлап һөйрәтеп үттеләр. Телдәрен аңларлыҡ түгел, шулай ҙа ҡытайса һәм инглизсә һөрәнләйҙәр кеүек. Ҡатын күҙҙәрен сытырҙатып йомдо. Был нимә, инде нисәмә йылдар ҡайғыра торғас, ҡолағыма салына башланымы?

— Бэтси! Бэтси!

Күҙгә күренмәгән берәү таныш тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе! Был ул ине!

— Бэтси, мин ҡайтырмын! Мин... мин әлегә һинең яҡҡа сыға алмайым!

Күҙгә күренмәгән шәүлә илап ебәрҙе, унан үҙен кемдер һөйрәтеп алып китте. Шыңшый-шыңшый китте...

Иҫке аэропортта булған сәйер ваҡиға тураһында социаль селтәрҙәрҙә хәбәр оҙаҡ йөрөнө. Шаһиттар — таможня хеҙмәткәрҙәре, һатыусылар, таксистар, бәғзе бер ҡаршылаусылар үҙ тәьҫораттары менән уртаҡлашты. Рәсми кешеләр һәм социопсихологтар был хәлде “күмәк психоз” тип атаны.

2014 йыл. Вьетнам. Малайзия.

Илдең ҙур ғына туристик үҙәге булған Нячанг ҡалаһына күсеп киттеләр. Ҡыҙ берәй ҡунаҡханаға массажист булып төшөргә ниәтләй ине. Был ауыр булмаҫ кеүек, сөнки тәжрибәһе етерлек, элек эшләп киткән салон хужаларынан тәҡдим ҡағыҙҙары ла бар. Ә Самат килгән көндөң иртәгәһенә үк исеме ярайһы уҡ танылған турфирмаға гид булып урынлашты. Урыҫса белә, инглизсә белә, вьет телендә һупалай. Ҡәүҙәгә лә арыу ғына, сәсенә сал төшә башлаған, зыялы ҡиәфәтле олпат ир. Уның һымаҡ гидтарҙы эҙләп табырға кәрәк әле! Ғөмүмән, был илдә үҙен үтә шәп булмаһа ла, әммә лайыҡлы кеше итеп тоя башлағайны. Лайыҡлы һәм кәрәкле кеше, тип өҫтәйек.

Нгуэн Тһан тип аталған төп урамдарҙың береһендә ике бүлмәле фатирға төштөләр. Ул европаса йыһазландырылғайны, Бэтсиҙың ҡулы ҡағылыу менән ғаиләнең ҡотло торлағына әйләнде. Ярты йылға алдан түләп ҡуйҙылар. Аҡсалары етерлек, бабай фатихаһын 3 мең доллар менән нығытҡайны. “Бөйөк кеше”нең “бөйөк” хеҙмәтен үҙенсә шул күләмдә баһалағайны. Ниңә, насар түгел...

Яңы эштәренә ныҡлап тотонмаҫ борон ял итеп алырға булдылар. Берәй аҙна самаһы. Был уларҙың үҙенә күрә туй сәфәре булырға тейеш.

Бер көнө Бэтси серле йылмайып ҡайтып инде. Түбәһе күккә тейгән, нәфис түңәрәк бите алланып киткән, күҙҙәре йондоҙҙай балҡый. Сюрприз! Күҙеңде йомоп тор!

— Юллама һинән булды, бүләк минән!

Самат күҙен асты, ҡыҙҙың ҡулында пластик ҡап хасил булғайны. Бик затлы һәм матур “ролекс” — Швейцарияла яһалған ҡул сәғәте ине. Брэнд, бер һүҙ менән әйткәндә! Рәхмәт, йәнем, ҡыуандырҙың... Бүләк ғашиҡтарҙың бәхетле секунд-минут-сәғәттәрен һанарға тотондо.

Март башында илгә терәлеп тиерлек ятҡан Малайзияға киттеләр. Бында башлыса мосолмандар йәшәй, Саматтың улар тураһында ишеткәне бар, күптән күргеһе килә ине. Эйе, илде ҡарап сығырҙар. Унан да бигерәк, Бэтси менән мөнәсәбәттәрен никах менән нығытып ҡуйыу ине ниәте. Ысын мәсеттә, ислам дине ҡанундарына тап килтереп... Һөйгәне ҡуш ҡуллап риза булды. Никахты ул һәр төрлө ымһыныуҙарҙан (ә улар бында етерлек), уйланмаған ғәмәлдәрҙән ҡурсалау әмәле тип аңлай ине.

Нячангтан Куала-Лумпурға тиклем бер сәғәтлек юл. 2 март кисендә осоп киттеләр ҙә, ҡараңғы төшөр-төшмәҫтән бына ошо “Алтын Аждаһа” ҡунаҡханаһына килеп яттылар. Иртәгеһенә үк ҡуртымға алынған мотобайкта сәфәргә ҡуҙғалдылар. Ҡарталары бар ине, иҫтәлекле урындарҙа туҡтай-туҡтай, илдең байтаҡ өлөшөн ҡыҙырып сыҡтылар. Бер нисә мәсетте күрергә насип булды, Самат уларҙа саҙаҡа ҡалдыра йөрөнө. Бер матур ғына йәшел ҡаласыҡта оло уҡ мулла менән, исеме Абдаллаһ Һажи, бик оҙаҡ әңгәмәләшеп ултырҙылар. Рәсәйҙәге ниндәйҙер бөйөк суфый тураһында төпсөнөп һорашты, тик Самат, сикһеҙ оятына ҡаршы, ул шәхес тураһында бер нәмә лә белмәй булып сыҡты. Доғаларҙан да аш доғаһы ғына иҫендә, ҡартатаһына рәхмәт.

— 7 март, йома көн мин һеҙгә ижәп уҡырмын...

Өлгөрмәнеләр. Таң менән телефон шылтыраны...

— Срочно ҡайтып ет! Бөгөн сыҡһаң — өлгөрәһең!

Башҡортостан. Өфө. 2014 йыл. 15 март.

— Рас-рас-рас-рас... Рас! Рас-рас-рас! Р-р-рас!

Тамада ханым, ҡупшы кәүҙәле йәш бисә, микрофонды көйләй. Ҡунаҡтар шаҡтай ҡыҙған, туҡтауһыҙ хәбәр алыша. Тик бер кем дә һис кемде тыңламай кеүек. Ресторан баҙар төҫлө геүләй. “Т” рәүешле теҙелгән өҫтәлдәр түрендә ултырған йәштәргә иғтибар кәмей төштө.

— Р-р-рас! Рас!

“Аҡсарлаҡ” ресторанында туй гөрләй. Фәүзиә улын өйләндерә. Ҡатын арҡаһы асыҡ оҙон бәрхәт күлдәктә, унығы тығыҙ тәнен тағы ла тулыраҡ күрһәтә, муйынында алтын сынйыр, сәсен ерән төҫкә буяткан. Эргәһендә абышҡаһы, ябыҡ ҡына һонтор ир заты. Зәңгәр пинжәктә, шундай уҡ салбарҙа, ҡыҙыл күлдәк кейгән, буйлы-буйлы күкһел галстук таҡҡан. Сыбар тутыйғош һымаҡ балҡып ултыра. Ниндәйҙер мәктәптә йәш техниктар түңәрәген алып бара ул, шуға ла аҡыл өйрәтергә ярата. Ләкин Фәүзиәгә дәғүәсе кәрәкмәй, ул үҙе аҡыллы. Абышҡаһы аңламай. Һөҙөмтәлә араларында ваҡыты-ваҡыты менән ҡыҙыу бәрелештәр тоҡанып киткеләй ине. Бына ир үҙ алдына нимәлер бупылдап ултырҙы-ултырҙы ла тороп баҫты. Көрмәлгән тел менән аҡыл һатып маташты, лаяҡыл иҫерек ине:

— Тәк! Унығын былай итәбеҙ, егеттәр...

— Етер! Ҡоҙаларҙан оял, исмаһам! — Фәүзиә уны пинжәк итәгенән тартып төшөрҙө. — Нишләп кенә алып килдем һине, мин алйот!

— Улар ми-ңә ҡо-ҡо-ҙа түгел!

Ниһәйәт, ҡупшы кәүҙәле тамада бисә микрофонды көйләп бөттө.

— Ә хәҙер ҡотлауҙар! Башта кәләштең ата-әсәһе саҡырыла!

Ҡыҙ яғы бик хисләнеп, әммә ҡыҫҡа телмәр тотто. Йәштәргә өс бүлмәле фатир асҡысы тапшырҙылар. Шулайталар инде, улар бит хәлле! Шулайталар инде, төп ҡоҙа бит “нефтянка”ла эшләй! Фәүзиә тырышып-тырышып йылмайҙы, көсөргәнеп ҡул сапты, үҙе эстән ҡара көйҙө.

Тегеләр ҡотлап бөткәс, һүҙҙе кейәү яғына бирҙеләр. Ҡоҙалар үҙ өҫтәленә ыңғайланы. Фәүзиә күлдәген тартҡылап рәтләне, яйлап ҡына урынынан тора башланы... Артурға ҡыйын ине. Хәҙер әсәһе уртаға сығасаҡ, сығасаҡ та оҙон-оҙаҡ хәбәргә төшөп китәсәк. Фекере буталасаҡ, яңынан башлаясаҡ, яңынан буталасаҡ. Эх, атаһы юҡ шул бында. Ҡайтып өлгөрмәне, ҡош телендәй генә булһа ла хәбәре юҡ. Әсәһенә лә үпкәһе ҙур ине егеттең. Атаһын туйға аҡса кәрәккәс кенә иҫенә төшөрҙө. Әгәр ҙә өйҙән ҡыуып сығармаһа, ниндәй матур итеп йәшәрҙәр ине...

Ишек асылды. Тыҡ-тыҡ-тыҡ... Һуңлаған ҡунаҡ бер кемгә лә иғтибар итмәҫтән уртаға үтте. Тауышы тоноғораҡ сыҡты:

— Ҡәҙерлеләрем! Мин һеҙҙе ҡотларға тип йәһәннәм төпкөлөнән ҡайттым... — Күҙенән йәш атылып сыҡты. — Теләгем шул! Бер ҡасан да, бер ниндәй шарттарҙа ла айырылмағыҙ!

Тыҡ. Тыҡ. Тыҡ. Ҡунаҡ сығып китте. Артурҙың йөҙө ап-аҡ булғайны:

— И-и-ишеттеңме? Ҡай-ҙа китте ул?

Кәләше уға аптырап ҡараны. Кем ҡайҙа китте? Нимәне ишеттеңме?

— Юҡ, һин... Һин күрҙеңме уны?

Диана ауырлы ине, шуға ла баянан бирле тоҙло ҡыярға ҡарап талпынып ултыра. Сәнскесен ҡуйҙы, Артурға үпкәсел ҡараш ташланы:

— Һин нимә ҡурҡыта-а-аһың? Прикольно тип уйлайһыңмы әллә...

...Әсәһе һаман итәктәрен тарҡылай-тартҡылай тороп килә. Уның абышҡаһы һаман үҙ алдына мыңғырҙап ултыра. Ҡайныһы менән ҡәйнәһе һаман үҙ өҫтәлдәренә ашыға. Зал элеккесә геү килә. Ҡупшы кәүҙәле тамада ҡатын йәнә микрофонды көйләргә керешә:

— Рас! Р-р-рас!

Артурҙан башҡа уны бер кем дә күрмәгәйне...

2014 йыл. 7 март. Малайзия. Куала-Лумпур.

Бэтси компьютерын тубығына ҡуйып алған да интернет киңлектәрен ҡыҙыра. "Куала-Лумпур — Мәскәү" рейсына бөгөнгә осһоҙораҡ билет эҙләй. Өфөгә тура осош юҡ. Сәстәре шәлкем-шәлкем булып битенә төшә, башын һелкетеп ебәреп, уларҙы яурыны аша алып ташлай. Яңынан экранға эйелеүе була, сәс шәлкемдәре тағы хәрәкәткә килә. Бэтси ваҡыты-ваҡыты менән ирендәрен бөрөштөрөп, нәфис танауын сирыштырып ҡуя. Килешә уға был ҡыланыштары, сикһеҙ килешә... Ниндәйҙер көнсығыш актрисаһын хәтерләтә, тик исемен дә, ниндәй фильмдан икәнен дә онотҡан. Хәйер, хәжәте юҡ. Бэтси фәҡәт уның һылыуҡайы.

— Ай! Ҡиммәт! 800 доллар...

— Оһо! Мәскәүҙән Өфөгә лә барырға кәрәк бит әле.

— Күстәнәс кәрәк, туйға һалырға аҡса кәрәк! — тип өҫтәне Бэтси.

Самат һыуытҡыстан һут алып килде, ҡыҙға ла ҡойоп бирҙе. Һыра шешәләре лә, шарап та шыплап тултырылғайны унда. Тик Самат уларға ҡағылманы. Бында килгәндән алып ул хәмер эсмәй. Шаҡтай таҙарып китте, олпатланды, төҫө асылды. Тәмәкене тарта тартыуға, тик хәҙер байтаҡка һирәгерәк. Һис шикһеҙ, Бэтси уға яҡшы тәьҫир итә.

Ҡыҙ йәнә сәғәт ярым самаһы төрлө авиакомпаниялирҙың сайттарында соҡсондо ла ҡысҡырып ебәрҙе. Тауышы шатлыҡлы ине.

— Ура! 450 доллар! Мәскәүгә түгел, Пекинға осаһың!

— Пекинға? Ләкин ул бит Ҡытайҙа? Пекин Рәсәйҙә түгел!

— Түгел, түгел! Ҡытайға осаһың, Ҡытайға! Ура!

Бэтси кескәй балалай сәпәкәй итеп ҡыуанды. Баҡһаң, Рәсәйгә ҡайтыуҙың шәп юлын эҙләп тапҡан икән. Тәүҙә Куала-Лумпурҙан оса Пекинға. Барып төшкәс, унда ике сәғәт көтөп ултыра. Шунан Рәсәйҙең "Бал" тигән бер авиакомпанияһының чартер самолетына ултыра. Ултыра ла туп-тура Өфөгә килеп төшә! 450 доллар! Ваҡыт айырмаһы 7 сәғәт, өлгөрөргә тейеш.

— Эй, аҡыллым! Кил әп итәйем үҙеңде!

Самат ҡыҙҙы ҡосағына алды. Тегеһе ҡарышҡан булды, йәнә нәзәкәтле генә итеп иренен ослайтты. Сабыр ит, йәнем, түҙ саҡ ҡына. Билетты биләп, заказ биреп ҡуяйым инде... Самолет, ул "Малайзия һауа юлдары"ның "Боингы", бөгөн төндә оса. Самат Өфөлә ике аҙна булырға йыйына ине. "Туйҙы үткәрешәм дә ҡайтам". Бэтси иһә иртәгә, 8 март төштән һуң Нячангҡа юл тоторға тейеш, бер юлы интернет аша үҙенә лә билет биләп ҡуйҙы. Көн байығас, юл аша урынлашҡан баяғы кафела хушлашыу кисәһе үткәрергә ниәт ҡылдылар. Унан тура аэропортҡа. Көньяҡ ҡояшы һүрелә төшкәйне.

2045 йыл. 12 ғинуар. Вьетнам. Нячанг ҡалаһы.

Бэтси эштән ғәҙәттәгенән алдараҡ ҡайтырға булды, иртәгә таң менән юлға сығаһы бар ине. Бынан өс йөҙ саҡрым алыҫлыҡта, Меконг ярҙарында урынлашҡан кескәй ауылда инде туҡһанға еткән әсәһе йәшәй, һуңғы арала сирләберәк тора. Хәлен белеп, бер аҙ аҡса ҡалдырып китмәксе. Ике магазинды ла (туристар өсөн сувенирҙар һата) ҡыҙы Кэттиға ҡалдырҙы, ул сауҙа рәтен белә, янында ике ярҙамсыһы ла бар. Борсолаһы түгел.

Урам буйлап атланы. Ҡараңғы төшкәйне, океандан еләҫ ел иҫә, көндөҙгө эҫе кәмей төшкән. Туристар көтөүе бермә-бер ишәйҙе. Кондиционерлы ҡунаҡханаларынан сыға башланылар, кемдер экскурсиянан, бәғзеһе пляждан ҡайта. Вьетнамдар юл ситтәренә өҫтәлдәр, ултырғыстар ҡуйып, ғаиләләре менән тамаҡ ялғай, байтағы тротуарҙа ултыра. Сит илдекеләр кафе-рестарандарға инеп тулған. Музыка яңғырай, велорикшалар йүгерешә, таксистар һөрәнләшә. Бихисап аттракциондар урынлашҡан Мәрйен утрауында күп һанлы уттар тоҡанды, шундағы тау битләүендәге “Pearl island” (“Мәрйен утрауы”) тигән эре яҙыу ҡыҙыл төҫтәр менән баҙлап яна башланы. Нячанг — туристар өсөн ожмах, бында миллионлаған-миллионлаған долларҙар әйләнә, шул байлыҡтың “күбеге” аҫаба халыҡҡа ла тама.

Ун биш минуттан фатирҙа ине. Еңелсә тамаҡ ялғап алғас, талғын ғына кондиционер эшләп торған ҡунаҡ бүлмәһенә үтте. Көҙгөнән уға ярайһы уҡ олоғайған, йыйырсыҡтары тәрәнәйә төшкән, сәстәренә сал ингән 57 йәшлек ҡатын төбәлде. Ҡартая, ваҡыт бит һис кемде лә аямай... Ҡағыҙ сәскәләр сылбыры һәм ағас ботаҡтары менән биҙәлгән ғаилә алтаренә үтте. Бында мәрхүм атаһының һәм ике ағаһының һүрәте ҡуйылған. Мөйөштә һөйгәненең дә фотоһы тора. Дөрөҫөрәге, икәүһенең рәсеме. Бынан утыҙ бер йыл элек төшкәндәр. Бәхетле йәш саҡтары. Ул ҡатынын, бала күтәргән кеүек, күккә сөйгән. Бэтси һөйгәнен ике ҡуллап муйынынан ҡосаҡлаған. Ғашиҡтарҙың йөҙөндә бәхет нурҙары уйнай... Бэтси хайран ҡалып торҙо, бәй, Кэтти ҡалай атаһына тартҡан! Йылмайыуы һуң... Быға саҡлы нисектер иғтибар иткәне юҡ ине.

Шәмдәрҙе тоҡандырҙы, хуш еҫле үләндәрҙе үртәне. Үләндәр күгелйем генә төтөн сығарып быҫҡынылар. Сүкәйеп ултырҙы, ике усын ҡаушырып, әйелә-әйелә, теләк теләй башланы. Ире хәбәрһеҙ юғалғас, будда ҡорамына йыш йөрөй, быға саҡлы иғтибар итмәгән ғөрөф-ғәҙәт, йола-дәстүрҙәрҙе тота башлағайны.

— Үлем юҡ, — тигәйне бер будда руханийы. — Ул тере, юғалмаған да. Бары тик ике донъя араһында тороп ҡалған. Ул өйөнә юл эҙләй. Ул аҙашҡан.

“Үлем юҡ”... Эйе, ул фәҡәт аҙашҡан. Ләкин әйләнеп ҡайтыр, билдәһеҙлек даръяһын кисеп, ваҡыт һәм арауыҡ диуарын емереп үтеп, мотлаҡ әйләнеп ҡайтыр. Бэтси уны барыбер көтөп алыр. Улар осрашыр! Был донъяла булмаһа, мәңгелек донъяла ҡауышырҙар. Берәһе сәскә, икенсеһе сәскә тажына ҡунған күбәләк булып.

Ниндәйҙер шәүлә ялтырап китте фото быялаһында. Тетрәнгән ҡатын артҡа боролдо. Күҙҙәре осрашты. Шәүлә юҡҡа сыҡты...

2014 йыл. 7— 8 март. Малайзия. Куала-Лумпур.

“Вирджин эйрпорт” халыҡ-ара аэропортына килеп еткәндә, рейсҡа ун биш минут ҡына ҡалғайны. Әлеге лә баяғы “тығындар” касафаты, көскә өлгөрҙөләр. Бик ашығып хушлаштылар. Әсе төйөр тығылды ҡатындың тамағына, ниңәлер

һөйгәнен һуңғы тапҡыр ҡосоуы һымаҡ ине. Саматты ла сикһеҙ һағыш солғаны. Күҙенә йәш тығыла башлауын тойоп, ҡырҡа боролдо ла зал буйлап китеп барҙы... Ниндәйҙер ҡытай рәссамдары төркөмөнә эйәрҙе, улар ҙа "Куала-Лумпур — Пекин" рейсына ашыға ине, төштәге кеүек иләҫ-миләҫ хәлдә теркәлеү үтте, багажын тапшырҙы, эскалаторға барып баҫты, икенсе ҡатҡа күтәрелә башланы. Боролоп ҡараны. Залда халыҡ ҡайнай. Тышта ямғыр яуа, күшеккән кешеләр ҡарһаланып килеп инә. Төшөрөлгән зонтиктар, бихисап сумаҙандар, юл сумкалары... Бөтәһе бергә буталды. Бэтсиҙың нескә һынын абайланы, ул һаман да ҙур быяла ишектәр янында меңкен генә булып баҫып тора ине. БыҒаса кисермәгән һағыш, наҙ, йәлләү тойғоһо солғаны ирҙе. Телефонынан шылтыратты:

— Борсолма, йәнем! Тиҙҙән ҡайтырмын!

— Мин көтөрмөн, — тип иламһыраны Бэтси.

Тейешле ваҡытынан саҡ ҡына һуңлап, "Боинг" бетон юлға тәгәрәп сыҡты, геүләп алға сапты, һауаға олғашты һәм, ҡыҙыл уттарын ялп-йолп килтереп, төн ҡараңғылығына инеп юғалды... Электрон табло 00 сәғәт 41 минут күрһәтә ине.

Бынан 3000 йыл элек. Көньяҡ Америка. Ҡайҙалыр Амазония шырлыҡтарында.

— Ай-йи! Ау-ау!

Тимер ҡоштоң алдағы ишеге асылды. Һәм унан кеше хасил булды. Һөлдә түгел, ә тере кеше! Ҡара Ягуар менән Ҡанлы Һөңгө ҡот осҡос тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе...

— Ау, ау, ау!!!

Уларға йөҙәрләгән боғаҙҙан сыҡҡан олоу ҡушылды. Яномауи яугирҙары тимер ҡошто ҡырмыҫҡа һымаҡ һырып алғайны.

Күктән төшкән әҙәми зат ярайһы уҡ ҡыйыу икән. Алға ҡарай бер-ике аҙым атланы. Ҡырағайҙар һөңгөләрен әҙер тотоп, саҡ ҡына сигенә бирҙе. Күҙҙәрендә ҡурҡыу. Сәйер кеше, ә бәлки әруахтыр, киң йылмайҙы, һаҡ ҡына ҡыланып, ялтыр беләҙекле сәғәтен ысҡындырҙы. Ике ҡулын да күтәрҙе — йәнәһе, уларға янамай, сүкәйеп ултырҙы. Бүләген синтетик балаҫ түшәлгән иҙәнгә һалды.

— Был һеҙгә! Был һеҙгә!

Ҡара Ягуар уның сәйер телен аңламаһа ла, һөжүм итергә йыйынмауына төшөндө. Юҡ, ул, киреһенсә, дуҫлыҡ тәҡдим итә... Ҡырағай сәғәтте эйелеп алды. Ғәжәйеп шәп, үтә лә серле бүләк ине был, ҡояш нурында ялтырап, балҡып тора. Тере йән ине, эсендәге бәләкәй йөрәге тигеҙ текелдәп тибә. Ҡанлы Һөңгө муйынындағы бетеүен сисә башланы. Был да һәйбәт бүләк! Һәр төрлө енпәрейҙән, яман әруахтарҙан ҡурсалай. Сәйер зат, тәңре, риза булыр, моғайын. Ләкин шул саҡ енле тимер ҡош үкереп ебәрҙе һәм ҡалтыранып ҡуҙғала башланы. Ҡырағайҙар менән сәйер әҙәм иҙәнгә йығылды, дәррәү тәгәрәшеп ишектән сығып остолар. Көмөш ҡош һауаға күтәрелә башлағайны...

— Ай-йи! Ай-йи! Ай-йи!

2014 йыл. 7 март. 06 сәғәт 15 минут. Малайзия. Куала-Лумпур.

Таң атмағайны әле. Ҡото осоп, манма тиргә батып уянды. "Алтын аждаһа" ҡунаҡханаһында. Ҡолағында һаман шул имәнес оран:

— Ай-йи! Ау! Ау!

Сәғәт нисә икән? “Ролексын” һәрмәп ҡараны, йоҡлар алдынан карауат янындағы тумбочкаға һалғайны. Ҡайҙа булды икән?

— Уф-ф-ф!

Бэтси кинәт ыңғырашып ебәрҙе лә үҙ тауышына үҙе тертләп уянды:

— Һин... Һин бында! — Илап уянғайны, күҙҙәре ҡып-ҡыҙыл. — Уф, ниндәй алама төш! Мине ташлап, әллә ҡайҙарҙа осоп тик йөрөнөң...

— Самолеттамы? — Саматтың йөрәге сыға яҙҙы. Нисек инде улай? Икеһенә бер төш кергәнме?

— Эйе, әллә ниндәй үлектәр менән, йыһан буйлап...

Оҙайлы быуаттар осрашмаған кешеләр кеүек бер-береһенең ҡосағына ташландылар. Йөрәктәре дөп-дөп килде. Улар бергә... һәм бүтән бер ҡасан да айырылышмаясаҡтар! Аллаға шөкөр, барыһы ла төш кенә булған. Төш кенә...

Авторҙан. Бына ошо урында беҙҙең ғашиҡтарҙың үҙҙәрен генә ҡалдырып, сәйер хикәйәтебеҙҙе тамамларға ла булыр ине. Әммә...

Әммә, йәғни.

**Эпилог**

...1889 йыл. 13 июнь. Ҡайҙалыр Көньяҡ Америкала, Амазония шырлыҡтарында.

Пьер де Моруа, билдәле этнограф, джунгли төпкөлөндә боҫоп йәшәгән индеецтарға барып сыҡты. Улар үҙҙәрен яномауи тип йөрөтә, йәғни “ысын кешеләр”. Һис ҡасан да аҡ тәнлеләр менән осрашҡандары булмаған. “Ысын кешеләр” был тирәлә көн иткән башҡа ырыуҙарҙан артыҡ айырылмай, әммә бик ыҫпай, таҙа халыҡ. Әкиәт һөйләргә яраталар.

— Бер мәл беҙгә күктән тәңре төшкән, — тип аңлатты ҡарт бағымсы. — Ул бик ҙур ҡошҡа атланып килгән. Ул ҡош яман итеп олой икән... Был олоуҙы ишетһә, хайуандар ҙа, әҙәмдәр ҙә аҡылдан яҙа, ти, тауҙар ишелә, ти, ағастар тамырынан аҡтарылып сыға, ти... Тәңре яномауи халҡын күп нәмәгә өйрәткән.

— Ә аҙаҡ ҡайҙа булған? Тәңрене әйтәм? — Ғалимды сикһеҙ ҡыҙыҡһыныу биләне. Тәржемәсеһе һорауҙы ҡабатланы. Ҡарт бағымсы саҡ ҡына тынып торҙо.

— Ул кире һауаға олғашҡан. Тимер ҡош кире килгән. Килгән дә ултыртып алып киткән... Ҡарттар һөйләй торғайны.

— Ә кем тип йөрөткәндәр ул тәңрене? Исеме нисек булған?

— Исемен әйтергә ярамай. Уны ысын кешеләр генә белә ала...

Пьер де Моруа яномауи араһында ярты йылдан ашыу йәшәне. Төпөш кәүҙәле, күңелсәк һәм ихлас был кешене барыһы ла ярата. Кистәрен ул ҡырағайҙарҙы хайран итеп ауыҙ гармунында уйнай ине.

Бер мәл, йәйге һунар башланмаҫ борон әле, аҡһаҡалдар ҡунаҡты үҙҙәренә саҡырҙы.

— Һин күктән төшкән тәңре тураһында һорағайның. Бик-бик борон булған ул хәл. Ул тәңре хаҡында бары тик иҫтәлектәр һәм бына ошо ҡомартҡы ғына тороп ҡалған.

Ҡарт юлбашсының ҡулында тутығып бөткән, быялаһы сатнаған “ролекс” хасил булды. Алтын ялатылған уҡтары 00 сәғәт 41 минутта туҡтап ҡалғайны...

*Февраль—апрель, 2015 йыл*